Йөкмәткеһе


1. **Аңлатма яҙыу…………………………………………………………………………………………………………………………….**
2. **Уҡыу предметына дөйөм характеристика………………………………………………………………………………………………..**
3. **Башҡорт дәүләт теле предметының уҡыу планындағы урыны……………………………………………………………………………..**
4. **Уҡыусыларҙың белем кимәленә талаптар………………………………………………………………………………………………**
5. **Уҡыу предметын үҙләштереүҙең шәхсән, метапредмет, предмет һөҙөмтәләре, башҡорт дәүләт теле предметын өйрәнеү һөҙөмтәләре…**
6. **Уҡытыу предметының йөкмәткеһе……………………………………………………………………………………………..**
7. **Тематик планлаштырыу……………………………………………………………………………………………………………**
8. **Уҡыу предметын матди-техник яҡтан тәьмин итеү……………………………………………………………………………..**
9. **Ҡушымта**

## 1.Аңлатма яҙыу

Уҡытыу рус телендә алып барылған мәктәптәрҙең рус балалары өсөн башҡорт теленән яҡынса эш программаһы дөйөм белем биреүҙең дәүләт стандартына нигеҙләнеп, заман талаптарына тура килтереп яңыртыу, уның сифатын һәм һөҙөмтәлеген күтәреү бурыстарын хәл итеү маҡсатында төҙөлдө һәм эш планын төҙөү өсөн нигеҙ булып тора.

**Был эш программаһы федераль һәм республика закондары талаптарына таянып төҙөлдө:**

- «Рәсәй Федерацияһы халыҡтары телдәре тураһында» законы,25.10.1991й.№1807-1
- Рәсәй Федерацияһының «Мәғариф тураһында» законы,29.12.2012й.№273-ФЗ
- «Башҡортостан Республикаһы халыҡтары телдәре тураһында» законы,15.02.1999й.№216
- Башҡортостан Республикаһының «Мәғариф тураһында» законы,5.01.2004й.№60
- Башҡортостан Республикаһында Милли мәғарифты үҫтереү концепцияһы,31.12.2009й.№УП-730.

Башҡортостан Республикаһы Мәғариф министрлығы тарафынан тәҡдим ителгән программа Башҡортостан Республикаһы Оҙайлы дауалауға мохтаж балалар өсөн, дәүләт ҡаҙна дөйөм белем биреү учреждениеһы, Шафран шифахана мәктәп- интернаты уҡыу планына ярашлы рәүештә тормошҡа ашырыла.

Эш программаһы Башҡортостан Республикаһы Мәғариф министрлығы тарафынан раҫланған “Башҡорт теле һәм әҙәбиәтенән программа”(Уҡытыу рус телендә алып барылған мәктәптәрҙең I – XI кластары өсөн). Төҙөүселәре:Тикеев Д.С., Толомбаев Х.А. һ.б.– Ижевск: «КнигоГрад», 2008.

Дәреслек: Башҡорт теле: Уҡытыу урыҫ телендә алып барылған мәктәптәрҙең 6-сы синыф уҡыусылары өсөн дәреслек. Усманова М.Ғ. – Өфө: Китап, 2006.

Эш программаһы 70 сәғәткә бүленгән (аҙнаға 2 сәғәт)

**Программа йөкмәткеһе 3 йүнәлештән тора:**
телмәр эшмәкәрлеген формалаштырыу;

телдең системаһын (фонетика, орфография, орфоэпия, грамматика, пунктуация) өйрәнеү;
бәйләнешле текст менән эшләргә өйрәтеүҙе күҙ уңында тота. Шулай уҡ унда уҡыусыларға әхлаҡи тәрбиә биреү күҙ уңында тотола .

**Программала ҡуйылған маҡсат һәм бурыстар:**
1. Уҡыусыларҙы башҡорт әҙәби телендә дөрөҫ һөйләшергә, өйҙә, йәмәғәт урындарында, хеҙмәт процесында башҡорт әҙәби телен практик файҙаланырға өйрәтеү.
2.Башҡорт теленең фонетик, лексик, грамматик нормалары буйынса белем һәм күнекмәләр биреү.
3. Башҡорт дәүләт теле дәрестәрендә балаларҙы башҡортса һөйләшергә, уҡырға, элементар яҙырға өйрәтеү бергә алып барыла. Тел менән әҙәби материалдар бергә ҡушып өйрәнелә - интеграция.
4. Үҙ фекереңде билдәле кимәлдә бәйләнешле итеп һөйләй һәм яҙа алыу күнекмәләрен формалаштырыу.
5. Телде өйрәнеү барышында балаларҙы башҡорт халҡының фәһемле тарихы, бай мәҙәниәте, сәнғәте, әҙәбиәте, башҡорт йолалары, күренекле шәхестәре, тыуған илдең тәбиғәте һ.б. менән таныштырыу, уларҙы башҡорт донъяһына алып инеү, башҡорт халҡына, уның теленә, үҙе йәшәгән төйәккә ихтирам һәм һөйөү тәрбиәләү.
6. Бөтә һаналғандарға таянып, рус һәм башҡорт телдәрен, әҙәбиәтен өйрәнеү нигеҙендә, балаларҙа телгә ихтирам тәрбиәләү, уларға илһөйәр һәм интернациональ тәрбиә биреү.

1. Класта һәм өйҙә башҡарыла торған яҙма эштәр өйрәтеү һәм тикшереү характерында була.

Уларға түбәндәгеләр инә:

- башҡорт теленән төрлө типтағы күнегеүҙәр;
- тәржемә эштәре (башҡорт теленән рус теленә һәм киреһенсә;
- дәреслектәрҙәге әҙәби текстарға пландар төҙөү;
- һорауҙарға яҙма яуаптар һәм иншалар;
- тел һәм әҙәби материалдар буйынса аналитик һәм дөйөмләштереү тибындағы схемалар, проекттар һ.б. төҙөү.

2. Башкорт теленең ағымдағы, сирек йәки йыл аҙағында, шулай уҡ уҡыу йылы башында инеү диктанты, ҙур темаларҙан һуң йомғаҡлау контроль эштәре үткәрелә. Ағымдағы контроль эштәр программаның өйрәнелгән материалын үҙләштереүҙе тикшереү маҡсатында уҙғарыла. Уларҙың төрө һәм үткәреү йышлығы өйрәнелә торған материалдың ҡатмарлылығынан, уҡыусыларҙың белем кимәленән сығып билдәләнә. Ағымдағы контроль эштәр өсөн уҡытыусы йә тотош дәресте, йә уның бер өлөшөн генә файҙалана ала.
3. Уҡыу йылы башында инеү диктанты, сирек һәм йыл аҙағында йомғаҡлау контроль эштәре мәктәп администрацияһы менән берлектә төҙөлгән график буйынса үткәрелә. Контроль эштәрҙе сиректең беренсе көнөндә һәм дүшәмбелә үткәреү тәкдим ителмәй.

Программа материалының үҙләштереү кимәле уҡыусыларҙың дәрестәрҙә телдән биргән яуаптарына һәм яҙма эштәренә ҡарап баһалана. Бының өсөн башкорт теленән һәр класта түбәндәге күләмдә контроль эштәр, яҙма эштәр үткәреү карала:

| **Яҙма эштәрҙең төрҙәре** |
|---|

| |
|---|
| Күсереп яҙыу-1 |
| Һорауҙарға яуап-1 |
| Диктант-5 |
| Изложение-1 |
| Инша -2 |

Яҙма эш төрҙәре (изложение,инша) яҙыу уҡыусыларҙың уҡыу кимәленә, белеменә, мөмкинселегенә ҡарап уҡытыусы ҡарамағына ҡалдырыла һәм улар урынына шул уҡ күләмдә түбәндәге яҙма эштәр үткәрергә мөмкин:

-карточкалар менән эш;

-тест;

-һүрәт буйынса һөйләмдәр төҙөү;

-текста һөйләмдәрҙә һүҙҙәр тәртибе;

-терәк текстар менән инша яҙырға өйрәнеү:

-һүҙлек диктанты;

-һөйләмдәр төҙөү;

-һүҙлек менән эш;

-һүрәтләү иншаһы;

-синквейн төҙөү (слайд төҙөү: шәжәрәләр, минең ғаиләмд

**2. Уҡыу предметына дөйөм характеристика**

*Коммуникатив компетенция* телмәр эшмәкәрлегенең төрҙәре, һөйләү һәм яҙма телмәр төрҙәрен үҙләштереүҙе иҫәптә тота, тел материалын һәм күнекмәләрҙе кәрәкле ситуацияларҙа ҡуллана алыуҙы талап итә. Коммуникатик компетенция аралашыуҙың маҡсатын билдәләй,телмәр ситуацияһын баһалай белеүҙе, аралашыусының коммуникация ысулдарын һәм ниәттәрен иҫәпкә алыуҙы, адекват стратегик аралашыуҙы һайлауҙы һәм үҙ телмәреңде аңлы рәүештә үҙгәртеүгә әҙер булыуҙы күҙ уңында тота.

*Тел һәм лингвистик компетенция* йәмғиәт күрененше булараҡ, тел тураһында тейешле белемде үҙләштереү нигеҙендә уның төҙөлөшөн, үҫешен, хәрәкәттә булыуын формалаштырыуҙы аңлата; башҡорт әҙәби теленең төп нормаларын үҙләштереү; һүҙлек запасын һәм уҡыусы телмәрененґграмматик төҙөлөшөн байытыу; фән булараҡ лингвистика тураһында тейешле белем, уның төп бүлектәренә кәрәкле булған тел күренешен һәм факттарын анализлау һәм баһалау мөмкинлеген формалаштырыу; төрлө төрҙәге лингвистик һүҙлектәр менән ҡуллана белеү.

*Мәҙәни компетенция* туған телдең мәҙәниәтен сағылдырыусы форма булараҡ аңлауҙы күҙ уңында тота, тел һәм халыҡ тарихының бәйләнештә булыуын, башҡорт теленең милли – мәҙәни үҙенсәлеген, башҡорт телмәр этикет нормаларын үҙләштереүҙе, халыҡ – ара аралашыу мәҙәниәтен үҙләштереү; милли мәҙәни компонентлы һүҙҙәр мәғәнәһен аңлатыуҙы белдерә. Башҡорт теле курсының коммуникатив – эшмәкәрлек йүнәләшен көсәйтеү, уны белем алыуҙа метапредмет һөҙөмтәләргә йүнәлтеү кешенең тышҡы мөхиткә тиҙ яраҡлашыу һәләтле һәм унда әүҙем эшмәкәрлекте дауам итеүгә һәләтле булараҡ, функциональ грамоталылыҡты формалаштырыуҙың мөһим шарттары булып тора.

Функциональ грамоталылыҡтың мөһим индикаторы – предмет – ара статус: *коммуникатив универсаль уҡыу эшмәкәрлеге* (телмәр эшмәкәрлегенең бөтә төрҙәре менән эш итеү, тыңдаштәре һәм оло кешеләр менән аралашыуҙы ҡороу; телдән һәм яҙма телмәрҙе адекват ҡабул итеү; ҡуйылған проблема буйынса үҙ ҡарашыңды теүәл, дөрөҫ, логик яҡтан төҙөк тасуири әйтеп биреү, аралашыу процесында яҙма һәм һөйләү телмәре нормаларын һәм башөорт телмәрэтикетын һаҡлау); (проблеманы аныҡлау, дөрөҫ аргументлай белеү, логик яҡтан төҙөк фекер йөрөтөү, иҫбатлай табыу, раҫлаусы йә кире ҡағыусы тезис килтереү; библиорафик эҙләнеүҙе тормошҡа ашырыу, төрлө сығанаҡтарҙан кәрәкле мәғлүмәтте алыу, төп һәм өҫтәмә мәғлүмәтте билдәләү, уҡыу маҡсатын асыҡлау, аралашыу маҡсатынан сығып уҡыу төрөн һайлау; мәғлүмәти – компьютер сараларын ҡулланыу; мәғлүмәтте системаға килтереү һәм киренән эшкәртеү, уны төрлө ысулдар менән күрһәтеү һ.б.); *регулятив универсаль уҡыу хәрәкәте* (эшмәкәрлек маҡсатын ҡуя һәм аныҡ итеп әйтә белеү, эшмәкәрлекте эҙмә – эҙлекле планлаштыра һәм кәрәк саҡта үҙгәртә белеү; үҙ контроль, үҙ баһалау, үҙ коррекциялау һ.б. тормошҡа ашырыу). Функциональ грамоталыҡтың мөһим компоненты телмәр эшмкәрлеге төрҙәренә нигеҙләнә һәм мәктәптә туған телде өйрәнеү аша уҡыусыларҙың фекерләү һәләтен маҡсатлы йүнәлештә үҫтереүҙе күҙ уңында тота.

Функциональ грамоталыҡты формалаштырыу, уҡыусыларҙың телмәр эшмәкәрлеген камиллаштырыу башҡорт теленең төҙөлөшө һәм аралашыуҙың төрлө шарттарында уны ҡулланыу үҙенсәлектәренән белеү нигеҙендә төҙөлә. Уҡыу процесы телде анализлау күнекмәләрен формалаштырыуға ғына йүнәлдерелгән булырға тейеш түгел, ә шулай уҡ телмәр мәҙәниәтен тәрбиәләү, тормошта мөһим күнекм әләрҙе формалаштырыу, төрлө уҡыу төрҙәрен ҡулланыу, тексты мәғлүмәти эшкәртеү, мәғлүмәтте төрлө формала эҙләү, телмәр ситуацияһына, әҙәби тел нормаларына һәм аралашыуҙың этик нормаларына яраҡлы төрлө ысулдарын файҙаланыу. Шулай итеп, төп дөйөм белем биреү мәәктәптәрендә башҡорт телен уҡытыу баланың дөйөм мәҙәни кимәлен үҫтереүгә, артабан уҡыуын төрлө белем биреү учреждениеларында дауам итә алырлыҡ кимәлдә булырға тейеш.

### 3. “Башҡорт теле” предметының уҡыу планындағы урыны

Уҡыу планы буйынса Оҙайлы дауалауға мохтаж балалар өсөн,дәүләт ҡаҙна дөйөм белем биреү учреждениеһы , Шафран шифахана мәктәп-интернаты икенсе быуын Федераль дәүләт стандарты планына ярашлы 3 вариант нигеҙендә. Дөйөм белем биреүсе мәктәптә башҡорт телен өйрәнеүгә 6 класта 70 сәғәт, аҙнаһына 2 сәғәт бүленә.

**Башҡорт телен өйрәнеүҙең шәхсән һөҙөмтәләренә түбәндәгеләр инә:**

- тел кешеләрҙең аралашыу сараһы икәнде аңлау, үҙләштереү;
- башҡорт телен милли мәҙәниәттең бер күренеше тип ҡабул итеү;
- дөрөҫ һөйләү теле һәм яҙма тел кешенең индивидуаль мәҙәнилеге күрһәткесе;
- үҙ телмәренә иғтибарлы булып үҙ-үҙен баһалау һәләтлелеге

**Башҡорт телен өйрәнеүҙең предмет- ара һөҙөмтәләре булып түбәндәгеләр тора:**

- белем алыу (уҡыу-уҡытыу) бурыстарын хәл итеү өсөн төрлө сығанаҡтарҙан кәрәкле мәғлүмәт табыу маҡсатында, телде ҡуллана белеү оҫталығы;
- аралашыуҙың маҡсаты, бурысы, сараһы, тел шарттарында ориентирлашыу;
- телмәрҙе һәм аралашыу ситуацияһын иҫәпкә алып, коммуникатив бурыстарҙы (диалог, монологик телмәр, яҙма текстар) уңышлы атҡарыу маҡсатында, адекват телмәр сараларын һайлап ала белеү;
- үҙ фекереңде һәм позицияңды мөмкин тиклем теүәл итеп аңлатырға ынтылыу;
- һорауҙар биреү оҫталығы

**Башҡорт телен өйрәнеүҙең предмет һөҙөмтәләренә түбәндәгеләр инә:**

- башҡорт әҙәби теле нормалары (орфоэпик, лексик, грамматик) һәм телмәр этикеты ҡағиҙәләре тураһында башланғыс төшөнсә алыу;
- орфографик ҡағиҙәләрҙе һәм тыныш билдәләрен (өйрәнелгән кимәлдә) ҡуйыу ҡағиҙәләрен белеү;
- өн, хәреф, һүҙ өлөшө, телмәр киҫәге, һөйләм киҫәге, ябай һөйләм кеүек тел берәмектәрен таба, сағыштыра, классификациялай ( бүлә), 3ылы38ырлай (характеристика бир9) алыу о6талы1ы;

үҙеңдең ғәмәлдәреңде контролдә тотоу, әйткәнде һәм яҙғанды тикшереү.

**5.Уҡыу предметын үҙләштереүҙең шәхсән, метапредмет, предмет һөҙөмтәләре, башҡорт дәүләт теле предметын өйрәнеү һөҙөмтәләре**

**Шәхси сифаттар:**

1. Үҙ милләтен,Ватанын, тыуған яғын яратыу;
2. Этник һәм милли сағылышын таныу:
   - үҙаллылыҡҡа, белем алыуға етди һәм яуаплы ҡарау;
   - мәктәп һәм кабинет йыһаздарына, уҡыу әсбаптарына һаҡсыл ҡарау;
   - атай-әсәйгә, тиҫтерҙәренә иғтибарлы һәм ихтирамлы булырға;
3. Ғаилә һәм йәмғиәт ҡиммәттәрен ихтирам итеү, үҙ аллы эшләү һәм үҙ эштәренә яуап бирергә әҙер булыу;
4. Ҡыҙыҡһыныусан, әүҙем булыу һәм донъяны танып белеүгә ынтылыу;
5. Динамик үҙгәреүсән һәм үҫтерешле донъяла үҙенең социаль ролен аңлау;
6. Әхлаҡ, социаль ғәҙеллек һәм ирек хаҡындағы ҡараштар нигеҙендә үҙ аллы үҫешкә һәләтле булыу;
7. Һәр саҡ этик тойғолар, ихтирамлылыҡ һәм эмоциональ – әхлаҡ һәм икенсе кешеләрҙең тойғоларын уртаҡлаша алыу;

**Метапредмет һәләттәре:**

1. Уҡыу күнекмәләре нигеҙҙәрен белеү, үҙенең эшмәкәрлеген ойошторорға һәләтле булыу;
2. үҙенең уҡыу эшмәкәрлегенең нигеҙҙәрен проектлау, баһаларға һәләтле булыу, уңышҡа өлгәшеүҙең эффектив юлдарын билдәләй белеү;
3. үҙенең йәш мөмкинлектәренән сығып компьютер грамоталылығына эйә булыу, кәрәкле мәғлүмәт йыйыу, анализлау, эшкәртеү маҡсатында Интернетҡа сыға белеү,тексты баҫыу, уны төҙәтә һәм техник эшкәртә белеү;
4. Аңлы уҡыу күнекмәләрен үҙләштереү, төрлө стиль һәм жанрҙағы текстарҙы үҙ аллы уҡый белеү, текстың төп фекерен билдәләү, йөкмәткеһен еткерә алыу, уның буйынса һорауҙарға яуап биреү;
5. Сағыштырыу, анализ, синтез, дөйөмләштереү кеүек логик эшмәкәрлеккә эйә булыу, оҡшаш сифаттары буйынса классификациялау, сәбәп-эҙемтә бәйләнештәрен  һәм оҡшашлыҡты булдырыу;

**Предмет һәләттәре:**

1. Башҡорт теле Башҡортостандың, рус теле Рәсәй Федерацияһының дәүләт һәм аралашыу теле булараҡ мәғәнәһен аңлау;
2. Телмәр этикетына, аралашыуҙа төрлө тасуири тел сараларына эйә булыу;
3. Уҡыуҙың төрлө төрҙәрен файҙаланыу: танышыу, өйрәнеү, һайлап, эҙләп, аңлы рәүештә ҡабул итеү һәм текстарҙың йөкмәткеһен аңлап, геройҙарҙың эшенә, ҡылығына әхлаҡи баһа биреү;

4. Уҡыу компонентына, үҫешкән телмәр оҫталығына эйә булыу, йәғни ҡысҡырып уҡыу һәм үҙ аллы уҡыу техникаһына анализдың элементар әҙәбиәт төшөнсәләр менән художестволы, фәнни- популяр һәм уҡыу текстарын үҙгәртеп ҡора белеү;
5. Һөйләмгә тулы синтаксик анализ: интонация буйынса һөйләм төрөн билдәләү, баш һәм эйәрсән киҫәктәрен табыу, һөйләмде мәғәнәһе яғынан бәйле һүҙбәйләнештәргә тарҡата белеү;
6. Текст буйынса изложение яҙыу, инша ижад итеү, тирә-яҡтағы күренештәрҙе һүрәтләп, хәл-ваҡиғаларҙы эҙмә-эҙ бәйән итеп, текст төҙөп яҙа белеү;

## 6. Уҡытыу предметының төп йөкмәткеһе

**Беҙҙе мәктәп ҡаршылай –8 сәғәт**

1 сентябрь- Белем көнө. Уҡыусыларҙың хеҙмәт көндәре башланыуы. Белем, тел тураһында мәҡәлдәр өйрәнеү. Грамматика буйынса 1-5-се кластарҙа үткәндәрҙе ҡабатлау.

**Башҡортостан ере буйлап- 10 сәғәт**

Башҡортостан Республикаһы, уның тарихы, күренекле шәхестәре, байлыҡтары менән танышыу. Тема буйынса һөйләү телмәрен үҫтереү, ижади эштәр башҡарыу. Башҡорт телендә эйәлек төшөнсәһе. Сифат. Сифат дәрәжәләре. Синоним. Антоним. Омоним.

**Юл йөрөү ҡағиҙәләре һәм билдәләре- 5 сәғәт**

Хәүефһеҙлек, юл йөрөү ҡағиҙәләре,транспорт төрҙәре тураһында һөйләргә,өйрәтеү,уҡыу материалын тасуири,аңлы уҡыу. Рәүеш.
Рәүеш дәрәжәләре.

**Почта.Телефон.Телеграф-8 сәғәт**

Почтала үҙеңде тота,телефондан дөрөҫ һөйләшә белеү,хат яҙыу ҡағиҙәләренә өйрәтеү.Ҡылым.Ҡылым һөйкәлештәре.Хәбәр һөй-кәлеше.Хәҙерге заман.

**Ҡыш дауам итә– 11 сәғәт**

Ҡыш миҙгеленең үҙенсәлектәре.Текстар уҡыу ,шиғырҙар,һынамыштар ятлау,һөйләү һәм яҙыу телмәрен үҫтереү,һүҙ байлығын арттырыу.Ҡылымдың хәбәр һөйкәлеше.Үткән заман. Киләсәк заман.

**Дуҫ ҡәҙерен бел– 8 сәғәт**

Ысын дуҫлыҡтың ҙур мәғәнәгә эйә булыуы,уны һаҡлай белеү.Дуҫлыҡ хаҡында әҫәрҙәр уҡыу,мәҡәлдәр табыу. Ҡылымдың шарт һөйкәлеше.

**Башҡортостан йылғалары,күлдәре.Экология мәсьәләһе- 6 сәғәт.**

Башҡортостандың тәбиғәте,уның байлыҡтары тураһындағы мәғлүмәт менән таныштырыу.Республикалағы йылға, күлдәр тураһында текстар уҡыу.Уларҙың атамаларының мәғәнәһе,килеп сығышы тураһында һөйләшеү.Экология мәсьәләһе.Ҡылымдың теләк һөйкәлеше.

**Һанарға өйрән – 6 сәғәт**

Көн режимы. Аҙыҡ-түлек магазины.Телмәрҙә һандарҙы практик ҡулланыу.Һан.Һан төркөмсәләре.Ябай һәм ҡушма һандар.

**Бына тағы яҙ килде-4 сәғәт**

Яҙ миҙгеленең үҙенсәлектәре. Яҙғы тәбиғәтте күҙәтеү.Осоп килеүсе ҡоштар тураһында һөйләшеү.1 май,9май байрамдары.Грамматика буйынса 6-сы класта үтелгәндәрҙе ҡабатлау.

**Тиҙҙән йәй етә 4 сәғәт**

Йәйге тәбиғәт, укыусыларҙың йәйге ялы тураһында әңгәмә. Тема буйынса текстар укыу,шиғырҙар ятлау. Тәбиғәткә экскурсия ойоштороу. Грамматика буйынса үтелгәндәрҙе ҡабатлау, нығытыу.

Әкиәт, хикәйә, йомаҡ, мәҡәлдәрҙе бер- береһенән айырыу. Бирелгән ситуацияға ярашлы бәләкәй экиәттәр төҙөү, шул экиәттәргә һүрәттәр төшөрөү.

**Тәңкә- тәңкә ҡарҙар яуа...**

Башҡортостанда ҡышҡы тәбиғәт, һауа торошо, үҫемлектәрҙең һәм йәнлектәрҙең ҡышлауы; ололарҙың һәм балаларҙың ҡышҡы эштәре, балаларҙың уйындары һәм эштәре тураһында хикәйәләр, шиғырҙар укыу һәм һөйләү.

Уҡылған әҫәрҙәр буйынса Яңы йылға ҡарата һүрәттәр төшөрөү, шыршы байрамына әҙерләнеү һәм уны үткәреү. Әҙәби геройҙарға характеристика элементтары.

Предметтың билдәһен белдереүсе һүҙҙәрҙең һөйләмдәге мәғәнәләрен күҙәтеү һәм практик үҙләштереү.

Текст. Тексты өлөштәргә бүлеү, өлөштәргә исем биреү. Текстың темаһын һәм төп фекерен практик үҙләштереү.

**Уралып ятҡан Уралда..**

Урал, уның тәбиғәте, байлығы, йылғалары, күлдәре, тауҙары, ҡалалары, экономикаһы, башҡорт әҙәбиәте, сәнғәте, күренекле кешеләре тураһында мәҡәләләр, шиғырҙар, хикәйәләр укыу һәм һөйләү. “Башҡортостан- тыуған төйәгем” темаһына әҙәби монтаж, альбомдар әҙерләү, уҡылған әҫәрҙәр, тәьҫораттар буйынса әңгәмәләр үткәреү, һүрәттәр төшөрөү.

Предметтың эшен белдереүсе һүҙҙәрҙең һөйләмдәге мәғәнәләрен, функцияларын күҙәтеү һәм практик үҙләштереү.

Бутап бирелгән һөйләмдәрҙән текст төҙөү. Изложение һәм инша элементтары менән практик танышыу һәм үҙләштереү.

**Ҡаһарманлыҡ юлынан**

Һалдат хеҙмәте- һәр ир-егеттең изге бурысы. Халҡыбыҙҙың ил дошмандарына ҡаршы героик көрәше тураһында мәҡәләләр, шиғырҙар, хикәйәләр укыу һәм һөйләү.

Ветеран һәм йәш һалдаттар менән осрашыу, әңгәмәләр үткәреү, һалдаттарға бағышланған альбом төҙөү.

Предметтың иҫәбен (һан), эш- хәлдең билдәһен (рәүеш) белдергән һүҙҙәр. Шул һүҙҙәрҙең мәғәнәләрен һәм телмәрҙә ҡулланылышын күҙәтеү һәм практик үҙләштереү.

Автобиография элементтары. Изложение һәм инша элементтарын өйрәнеү.

**8 март- ҡатын- ҡыҙҙар көнө**

Илебеҙҙә ҡатын- ҡыҙҙар хеҙмәте, республикалағы данлы ҡатын- ҡыҙҙар, уларға ихтирам тураһында мәҡәләләр, шиғырҙар, хикәйәләр укыу һәм һөйләү.

Алдынғы ҡатын- ҡыҙҙар менән осрашыу, әңгәмәләр үткәреү; “8 март- әсәйҙәр байрамы” тигән иртәлек әҙерләү һәм үткәреү, альбом төҙөү, һүрәттәр төшөрөү.

Предметтың эшен, билдәһен, эш хәлдең билдәһен белдереүсе һүҙҙәрҙең телмәрҙәге (һөйләмдәге) роле һәм үҙенсәлектәре (ҡабатлау, тәрәнәйтеү).

Текста элементар һүрәтләү саралары.

**Яҙҙар килә шаулап- гөрләп…**

Башҡортостанда яҙғы тәбиғәт, уның күренештәре, хайуандар һәм үҫемлектәр тормошондағы үҙгәрештәр, кешеләрҙең яҙғы хеҙмәте тураһында мәҡәләләр, шиғырҙар, хикәйәләр уҡыу һәм һөйләү.

Ҡоштарҙы ҡаршылау, бүлмә гөлдәре үҫтереү, баҡса эштәре тураһында әңгәмәләр үткәреү, темаға ҡарата һүрәттәр төшөрөү.

Башҡорт телендә һөйләмдең интонацион төрҙәре. Уларҙа тыныш билдәләре, тасуири уҡыу (иҫкә төшөрөү, ҡабатлау, нығытыу).

Текст. Уның өлөштәре, өлөштәргә исем биреү. Ябай план менән практик танышыу.

## 7. Уҡыу - уҡытыу методик ҡулланмалар исемлеге


1. Усманова М. Г. Башҡорт теле грамматикаһы таблицаларҙа һәм схемаларҙа.
2. Аслаев Т. Х., Атнағолова С.В. Телмәр үҫтереү буйынса сюжетлы картиналар.-Өфө:Китап, 1996.
3. Башҡорт әҙәбиәте буйынса аудио-видеоәсбап.- Өфө: Башҡортостан Республикаһының Мәғариф министрлығы. 2005.
4. Башҡорт теле грамматикаһы таблицаларҙа. Фонетика. Морфология. - Башҡортостандың бәләкәй даһийы. Өфө : «Эдвис» уҡытыу – методика үҙәге, 2008.
5. Башҡорт теленән диктанттар һәм изложениелар йыйынтығы. Усманова М.Ғ., Ғәбитова З.М. – Өфө: Китап, 2009.
6. Ғафаров Б.Б.Әҙәбиәт уҡытыу методикаһы. – Өфө : Китап, 2008. – 352 бит.
7. 5-9 кластарҙа башҡорт телен уҡытыу методикаһы /Аҙнағолов Р.Ғ., Тикеев Д.С. һ.б. – Өфө : Китап, 1996. – 320 бит.
8. Раҡаева Ә.С., Дәүләтшина М.С. Башҡорт теленән контроль һорауҙар, тестар ҡулланмаһы. – Өфө: Педкнига, 2008. – 96 бит.
9. Уҡыусылар өсөн тел буйынса уҡыу- уҡытыу методик комплекты : Башҡорт теле: Уҡытыу урыҫ телендә алып барылған мәктәптәрҙең 6-сы класс башҡорт балалары өсөн дәреслек. Тикеев Д.С., Хажин В.И.,һ.б. – Өфө: Китап, 2008.
10. Алдырханова Ә. Р. Салауат батыр - ир күрке. - Өфө: Китап, 2009
11. Нафиҡова З. Ә., Аҙнабаева Ф. Ә. Тылсымлы өндәр. Методик ҡулланма.- Өфө: Китап, 2010
12. Усманова З. Ғ. Башҡорт теле грамматикаһы таблицаларҙа һәм схемаларҙа.- Өфө: Китап, 2007
13. Ғәбитова З. М., Усманова М. Ғ. Уҡытыу рус телендә алып барылған мәктәптәрҙең 6-сы класс уҡыусылары өсөн «Башҡорт теле» дәреслегенә методик күрһәтмәләр.- Өфө: Китап, 2003
14. Надршина Ф. А. Русско-башкирский словарь пословиц-эквивалентов.-Уфа: Китап, 2008


## Материаль-техник ҡулланмалар

–телевизор;
–видеомагнитофон;
–DVD;

–компьютер;
–мультимедиапроектор.

## 4. Уҡыусыларҙың белем кимәленә талаптар

1. Һүрәтләү, хикәйәләү тибындағы текстарҙы тыңлау һәм аңлап ҡабул итеү;
2. Бирелгән тема буйынса диалог төҙөү, диалогты дауам итеү;
3. Ишеткәнде, күргәнде 4-6 һөйләм менән бәйләнешле итеп һөйләү.
4. Ҡысҡырып шыма һәм тасури уҡыу.
5. Һүҙлек һүҙҙәрен белеү һәм уларҙы телмәрҙә дөрөҫ ҡулланыу.
6. Дәрестә өйрәнелгән грамматик материалды практик ҡуллана белеү.
7. Ижади диктанттар, өйрәтеү изложениелары һәм иншалары яҙыу
8. Программала күрһәтелгән шиғырҙарҙы яттан белеү; 3-4 башҡорт йырын башҡара белеү, мәктәптең үҙешмәкәр сараларында ҡатнашыу, сәхнәлә сығыш яһау. Бөтә был эштәр тураһында бәйләнешле һөйләй белеү.